# Башҡортса һәм русса мәҡәлдәр

**Абайламай һөйләгән - ауырымай үлгән.**
**Лишнее говорить - себе вредить.**

**Ағас емеше менән матур.**
**Дерево славится плодами.**

**Ағас күрке – япраҡ, әҙәм күрке – сепрәк.**
**Наряди пень в вешний день,и пень будет красавчик.**

**Ағасты япраҡ биҙәй, кешене хеҙмәт биҙәй.**
**Дерево красит лист, а человека - труд.**

**Ай күрҙе, ҡояш алды.**
**Был да сплыл.**

**Айыуҙан ҡурҡҡан – урманға бармаған.**
**Волков бояться - в лес не ходить.**

**Айыуҙы ла бейергә өйрәтәләр.**
**И медведя плясать учат.**

**Аҡыл - алтын.**
**Ум-разум дороже золота.**

**Аҡыллыға ым да етә.**
**Умному намек, глупому толчок.**

**Алдаҡсы дуҫың булғансы, ысын дошманың булһын.**
**Лучше иметь настоящего врага, чем друга-лжеца.**

**Алданма ҡыҙыл алмаға.**
**Не все то золото, что блестит.**

**Алтын-көмөш яуған ерҙән, тыуған-үҫкән ил яҡшы.**
**Родная сторона - колыбель, чужая - дырявое корыто.**

**Арпа сәсеп, бойҙай үҫмәй.**
**Что посеешь, то и пожнешь.**

**Ас хәлен туҡ белмәй.**
**Сытый голодного не разумеет.**

**Аҫыл һөйәк ҙур булмаҫ, ҡайҙа барһа, хур булмаҫ.**
**Мал золотник, да дорог.**

**Атҡан уҡ кире ҡайтмаҫ.**
**Выпущенная стрела обратно не вернется.**

**Ашаған табағыңа төкөрмә.**
**Не плюй в колодец, пригодится воды напиться.**

**Ашыҡҡан – ашҡа бешкән.**
**Поспешишь, людей насмешишь.**

**Байлыҡ - бер айлыҡ, аҡыл – мәңгелек.**
**Богатство на час, а ум до веку.**

**Байрам ашы - ҡара-ҡаршы.**
**Хлеб-соль платежом красен.**

**Беҙ ҡапсыҡта ятмай.**
**Шила в мешке не утаишь.**

**Беләге бар берҙе йығыр, белеме бар меңде йығыр.**
**Рукой победишь одного, а умом и знанием - тысячи.**

**Бер тарынан бутҡа булмай.**
**Из одного пшенного зернышка кашу не сваришь.**

**Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына.**
**На ловца и зверь бежит.**

**Буҙ2ың бүрке яна.**
**На воре шапка горит.**

**Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай.**
**Как волка не корми, он все в лес смотрит.**

**Вәғәҙә- иман.**
**Уговор дороже денег.**

**Донъя көтөү- йылға кисеү түгел.**
**Жизнь прожить - не поле перейти.**

**Дөйә лә бүләк, төймә лә бүләк.**
**И верблюд подарок, и пуговица подарок.**

**Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.**
**Джигиту и семидесяти ремесел мало.**

**Егәрленең  ҡулы егерме.**
**За что ни возьмется, все кипит.**

**Ете тапҡыр үлсә, бер тапҡыр киҫ.**
**Семь раз отмерь, один раз отрежь.**

**Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.**
**Не имей сто рублей, а имей сто друзей.**

**Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә.**
**Волка ноги кормят.**

**Йәйге көн йыл туйҙыра.**
**Летний день год кормит.**

**Кейемеңә ҡарап ҡаршылайҙар, аҡылыңа ҡарап оҙаталар.**
**По одежде встречают, по уму провожают.**

**Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.**
**В чью телегу сядешь, того и песню поешь.**

**Кем эшләй, шул ашай.**
**Кто работает, тот ест.**

**Кем эшләмәй, шул ашамай.**
**Кто не работает, тот не ест.**